*Нәзир ҠОЛБАХТИН,*
*тарих фәндәре докторы*

# 1773—1775 ЙЫЛДАРҘАҒЫ КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫ ЮЛБАШСЫЛАРЫ

## ҠАСҠЫН ҺАМАРОВ

*1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы башҡорт халҡы өсөн күп быуаттарға һуҙылған милли-азатлыҡ көрәшенең иң сағыу, данлыҡлы биттәренең береһе булып тора. Был һуғышта халҡыбыҙ араһынан тиҫтәләгән күренекле юлбашсы үҫеп сыға, генералдар һәм полковниктар һаны ғына ла 65-кә етә. Күбеһенең көрәш юлы, яҙмышы милләттәштәребеҙгә билдәһеҙ, әммә Мәскәү, Санкт-Петербург архивтарында һаҡланған Йәшерен комиссиялар, Сенат йәшерен экспедицияһы документтары әлегә ныҡлап өйрәнелмәгән. Рәсәй дәүләт боронғо акттар архивы (РГАДА), Рәсәй дәүләт хәрби-тарихи архивы (РГВИА) һәм башҡа архив фондтарында ул документтарҙан төҙөлгән меңләп том һаҡлана. Автор 30 йыл дауамында уларҙы өйрәнеп, ҡайһы бер юлбашсыларҙың көрәш тарихын тергеҙеүгә өлгәште. «Ватандаш» уҡыусыларына хеҙмәттең бер өлөшө тәҡдим ителә.*

Баш күтәреүселәр хәрәкәтенә Ҡасҡын урта йәшендә килә. 1775 йылдың 6 апрелендә Ҡазан Йәшерен комиссияһында һорау алғанда уның Өфө провинцияһының Мостафа ауылынан икәнлеге әйтелә.[1] Беренсе тапҡыр Ҡасҡын 1754 йылғы документтарҙа телгә алына: унда ул Кинйә Арыҫланов, Яманһары Яппаров, Ҡотлогилде Абдрахманов һәм Ноғай даруғаһы башҡорттарының башҡа һайланма вәкилдәре менән Яйыҡ, Ағиҙел, Һаҡмар йылғалары буйындағы ерҙәргә һум рудниктарға завод хужалары Твердышев һәм Мясников менән килешеү (купчая) төҙөй.[2] Икенсе тапҡыр Ҡасҡын Тамъян олоҫо башҡорттарынан һайланма вәкил булып Урман-Юшатыр, Иҫке һәм Яңы Йылан-Ташлы йылғалары буйындағы ерҙәргә И.Л.Тимашев менән килешеү төҙөүҙә ҡатнаша.[3] 1764 йылда ул Ағиҙел һәм Бөлзә йылғалары буйындағы ерҙәрҙе 20 йылға төрлө өйәҙ татарҙарына оброкка файҙаланырға тапшырыу буйынса документ әҙерләнгәндә Тамъян олоҫо башҡорттарының һайланма вәкилленә етәкселек итә.[4] Ҡасҡын Ноғай даруғаһы башҡорттарының губернатор Д.В.Волковҡа яҙған билдәле хатында ла телгә алына.[5]

Крәҫтиәндәр һуғышы башланғанда Ҡасҡын тәжрибәле хәрби етәксе була. Ул Тамъян олоҫоноң поход старшинаһы вазифаһын үтәгән. 1770—1772 йылдарҙа Польшала конфедераттар ихтилалын баҫтырыуҙа ҡатнашҡан — башҡорт корпусы полкына етәкселек иткән. Был ваҡытта

ул Пугачев ихтилалындағы бик күп фекерҙәштәре һәм дошмандары менән танышҡан булырға тейеш. Әйткәндәй, корпус командиры Ҡолой Балтасов, ә уның урынбаҫары Ҡәйеп Зыямбәтов булған.[6]

Ҡаҫҡындың баш күтәреүселәр яғына сығыуы сығанаҡтарҙа бер аҙ буталсыҡ бирелгән. Ҡазан Йәшерен комиссияһында «колодник» Ҡаҫҡын Һамаров түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: «Бердаға килгәс, иң тәүҙә башҡорт муллаһы Кинйә Арыҫлановҡа барҙым (ул Пугачев янында ине). Ә ул мине, Пугачев яуыз түгел — батша, тип ышандырҙы. Кинйә уны батша тип таныуын әйтте». Аҙаҡ Кинйә уны Пугачевҡа алып бара, тегеһе үҙен «батша» тип таныштыра. «Ниңә һин миңә күптән килмәнең, бының өсөн һине аҫырға кәрәк», — ти Пугачев. Ул: «Миңә яҡын ғына, Стәрлетамаҡ пристанендә, батшабикә Екатерина Алексеевнаның армияһы тора», — тип яуап бирә. Һәм ялған батша, уны тыңлап бөтөрөп, «үҙенә тоғро хеҙмәт итергә бойора. Шуға уның яғында ҡала, ә ялған батша уны старшина яһап, эргәһенән ебәрә».[7] Өфө провинцияһы канцелярияһының губернатор Рейнсдорпҡа 1773 йылдың 28 октябрендә ебәргән рапортында Миндәйҙең, «яуыздар, старшина Ҡаҫҡын Һамаровты саҡырып, янына биш тапҡыр кеше ебәргәндәр, ләкин ул, ауырыйым, тип, барманы», тигән мәғлүмәте тапшырыла.[8]

Был документтарға ҡарағанда, Ҡаҫҡын ихтилалсыларға тиҙ генә ҡушылмаған, оҙаҡ икеләнгән һәм тик Пугачевтың күп тапҡырҙар саҡырыуынан һуң ғына Берда лагерына килгән. Бының ваҡыты ла билдәләнгән — 1773 йылдың 18 октябре. Илебеҙ тарихсылары, революцияға тиклемгеләре лә, совет осорондағылары ла, ошо фекерҙе таный. Әммә үрҙә килтерелгән сығанаҡ шик уята. Ҡаҫҡын яуап тотҡанда властәр алдындағы ғәйебен кәметергә тырышҡандыр, шуға Пугачевтың күп тапҡырҙар саҡырыуын уйлап сығарыуы ихтимал. Миндәйҙең мәғлүмәтенә килгәндә, ул кемдәндер ишеткәнен генә һөйләгән. Сығанаҡты иғтибарлы өйрәнеү шуға инандыра.

Был юлдарҙың авторы РГАДА фондтарында Ҡаҫҡындың Пугачев яғына күсеүе тураһында ышаныслы сығанаҡҡа юлыҡты. Уға ярашлы, Ҡаҫҡын 12 октябрҙә 20 атлы башҡорттан торған төркөм менән Твердышев-Мясниковтың Воскресенск заводын баҫып ала.[9] Заводта ваҡиғалар бына нисек йәйелдерелә.

Завод крәҫтиәндәре үҙ ирке менән баш күтәреүселәр яғына күсергә әҙерләнә. 12 октябргә ҡаршы төндә уларҙың вәкиле йәшерен рәүештә Ҡаҫҡын эргәһенә килә, ике яҡ та бергә хәрәкәт итергә килешә. 12 октябрҙә иртән башҡорт төркөмө заводҡа яҡынлаша һәм завод крәҫтиәндәре ҡәлғә ҡапҡаларын аса. Заводта Ҡаҫҡын 15 октябргә тиклем була. Был ваҡыт эсендә Ҡаҫҡын 600 завод крәҫтиәнен баш күтәреүселәр армияһына яҙа һәм Бердаға оҙата. Ул баш күтәреүселәр үҙәгенә 14 туп, 300 йәҙрә, ҡурғаш, дары һ. б. кәрәк-яраҡ, 30 мең һум аҡса һәм көмөш тартып алып оҙата. Ҡарғалы руднигынан Бердаға 50 үгеҙ, 4 туп, дары, мылтыҡтар, 1000 һум самаһы аҡса оҙатыла. Завод контораһында Ҡаҫҡын векселдәрҙе, бурыс ҡағыҙҙарын, шнурлы кенәгәләрҙе, крепостной акттарҙы, указдарҙы, хаттарҙы һәм Твердышев-Мясников

компанияһы заводтары алып барған контора ҡағыҙҙарына ҡағылышлы аҡса документтарын юҡ итә. Завод крәҫтиәндәре үҙҙәре күрә алмаған управляющий прапорщик Василий Кулалаевты ҡулға алыуҙы һорай. Тегеһе ҡасып өлгөрә һәм, өйөндә бикләнеп, тәҙрәнән атыша башлай. Крәҫтиәндәр йортто әйләндереп һалам түшәй һәм «ҡәбәхәт» иҙеүсене ғаиләһе менән бергә яндыра. Үҙ ирке менән баш күтәреүселәр яғына күсергә теләк белдереүсе өлкән приказчик П.Беспалов ҡарауыл аҫтында Бердаға оҙатыла. Завод ҡасабаһында аҙыҡ-түлек, еҙ һауыт-һаба һәм эш ҡоралдары магазиндары асыла, завод эшселәренә икмәк таратыу ойошторола. Крәҫтиәндәрҙе баш күтәреүселәр армияһына йәлеп итеү өсөн Преображенск һәм Архангельск заводтарына Воскресенск заводы крәҫтиәне Исай Рыжов ебәрелә. Ошонан һуң Ҡасҡын Бердаға юл тота һәм 18 октябрҙә Кинйә алдына баҫа. Кинйә уны Пугачев менән таныштыра.[10]

Шулай итеп, Ҡасҡын ихтилал башланғанда икеләнеп тормаған һәм «батша Петр Федоровичта» — Пугачевта шикләнмәгән, ә уға барып ҡушылған һәм, Воскресенск заводын баҫып алып, ҡыйыу рәүештә үҙаллы көрәш башлаған. Ҡасҡындың 12 октябрҙә заводты баҫып алыуын айырым тарихсылар ҙа таный.[11] 14 октябрҙә Табын казактары Воскресенск заводы крәҫтиәне Исай Рыжиковты ҡулға ала, ул түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: «...Воскресенск заводы бында ебәрелгән яуыздар төркөмө һәм крәҫтиәндәр — йәмғеһе 70-ләгән кеше — тарафынан ҡыйратылды; дары, мылтыҡтар, 30 мең самаһы ҡаҙна аҡсаһы һәм көмөш яуыздар лагерына оҙатылды; управитель прапорщик Кулалаев яндырылды».[12]

Исай Рыжиков Ҡасҡын Преображенск һәм Архангельск заводтары крәҫтиәндәрен өгөтләү өсөн ебәргән Исай Рыжов булып сыға — ул быны үҙенән һорау алғанда таный. Уҡыусы иғтибар итеүенсә, Рыжов биргән мәғлүмәттәр үрҙә килтерелгән сығанаҡҡа һүҙмә-һүҙ тура килә. Пугачев менән Ҡасҡын биргән икеле мәғлүмәттәргә килһәк, уларҙың шаһиттарҙы алдатырға һәм властәр алдында ғәйебен мөмкин тиклем нығыраҡ кәметергә тырышыуы аңлашылып тора.

Шулай итеп, баш күтәреү эшмәкәрлеген 12 октябрҙә Воскресенск заводын баҫып алыуҙан һәм 18 октябрҙә Берда лагерына килеүҙән, Пугачевтан поход старшинаһы чинын алыуҙан башлап, Ҡасҡын Нуғай даруғаһы башҡорттарын ихтилалға күтәреү һәм язалаусыларға ҡаршы көрәш ойоштороу буйынса көслө эшмәкәрлек йәйелдерә. Тәжрибәле етәксе һәм хәрби командир булараҡ, ул етеҙ һәм ҡыйыу эш итә. Был йәһәттән Ҡасҡын Крәҫтиәндәр һуғышының иң сағыу шәхестәренең береһе булып күҙ алдына баҫа. Уның атлы сиреүе Башҡортостандың көньяғында, Стәрлетамаҡ пристане менән Берда лагеры араһындағы күҙ иңләмәҫ иркенлектә ҡойондай елдерә. Был юҫыҡта Ҡасҡындың хәрби хәрәкәттәрен йәш Салауат йәки тәжрибәле Яйыҡ казагы Андрей Овчинников менән сағыштырып булыр ине. Ҡасҡын 1773 йылдың октябрь һәм ноябрь айҙарында ошо биләмәләрҙең тулы хоҡуҡлы хужаһы булып ҡала. Уның сиреүе үҫкәндән-үҫә, Нуғай даруғаһының бик күп старшиналары уға килеп ҡушыла. Нуғайбәк казагы Алексей Еремкин күрһәтеүенсә, ноябрҙә

Ҡасҡындың поход канцелярияһы була һәм ул, Еремкин, унда писарь булып хеҙмәт итә. Татар телендә яҙыусы Әмир Усманов була.[13]

Тиҙҙән Ҡасҡын етди мәсьәләләрҙе хәл итерлек отряд туплай. Санкт-Петербург авторҙары раҫлауынса, Ҡасҡынды Пугачев «Башҡортостанға урындарҙа көрәш йәйелдереү өсөн» ебәргән.[14] 18 ноябрҙән 19-ына ҡаршы төндә ул бер ынтылышта Стәрлетамаҡ тоҙ пристанен яулап ала. Табын ҡәлғәһе коменданты А.Моисеев хәбәр итеүенсә, майорҙар И.К. Маршилов менән Н.Голов Стәрлетамаҡтан Өфөгә саҡ ҡасып өлгөрә, ә 600 кешелек башҡорт-мишәр язалаусылар корпусы Ҡасҡын ҡулына төшә.[15] Моисеев, баш күтәреүселәр Табынға юлланырға ниәтләнә, тип борсола. Уның хәүефләнеүе бик тиҙ дөрөҫкә сыға. 19 ноябрҙә Ҡасҡындың отряды Табын ҡәлғәһенә инә. Был юлы капитан А.Моисеев үҙе Өфөгә ҡаса. 2 туп, дары һәм башҡа һуғыш кәрәк-яраҡтарын алып, Ҡасҡын Өфөгә юл тота.

Өфө провинцияның хакимиәт үҙәге була һәм башҡорттар өсөн милли һәм социаль иҙеүҙе кәүҙәләндерә. Шуға күрә Ҡасҡын, Ҡаранай, Әлибай һәм Нуғай даруғаһының башҡа старшиналарының Өфөнө баҫып алырға ынтылыуы аңлашыла. 24 ноябрҙә Ҡасҡындың дүрт меңлек ғәскәре Өфөгә яҡынлаша һәм ҡамауҙы башлай. Ҡасҡын менән бергә баш күтәреүселәр ғәскәре башында Өфө казактарының 50 кешелек отряд башлығы Иван Губанов, башҡорттарҙан Пугачев полковниктары Ҡаранай Моратов, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Турай Ишәлин, Ибраһим Мерәсев, Ишҡар Арыҫланов, Ҡәйеп Зыямбәтов, Ҡанбулат Юлдашев һәм башҡалар тора.[16]

Шулай итеп, Берда лагерына килеүенә бер ай тигәндә, Ҡасҡын ысын юлбашсыға әйләнә. Ул Өфө районында баш күтәреүселәр армияһын туплай һәм, Пугачев эмиссары И.Н.Зарубин-Чика килгәнгә тиклем, 1773 йылдың 24 ноябренән алып 1774 йылдың 12 ғинуарына тиклем Чесноковкалағы баш күтәреүселәр ғәскәрен көсәйтеү, уның сафтарына урындағы халыҡты ҡабул итеү, аҙыҡ-түлек, мал аҙығы табыу һ.б. менән шөғөлләнә. 1773 йылдың 6 декабрендәге указында ул Дим йылғаһы бассейнындағы мең олоҫтары старшиналарының «император Петр Федоровичты таныуын» һәм һәр ихатанан әҙерләнеп... ҡоралланып... Өфө ҡалаһына походҡа юлланыуҙарын талап итә.[17] Был йәһәттән ул юғары талапсанлыҡ күрһәтә, был уның писаре А.Еремкиндың атаһы — ауыл байын ҡулға алыуында ла асыҡ сағыла.[18] 12 декабрҙәге указында Ҡасҡындың ниндәй киң эшмәкәрлек йәйелдереүе күренә: ул батшаға баш эйеүҙе, уның манифестарын ябай халыҡҡа аңлатып таратыуҙы, «үҙҙәренең командаһындағы һәр йорттан һуғышҡа яраҡлы кеше алып, ҡоралландырып...», Өфө эргәһенә оҙатыуҙы талап итә, «ә баш күтәреүселәргә туптар ебәрергә вәғәҙә итә».[19] Был указында Ҡасҡын Ҡазан даруғаһы Йылан олоҫоноң старшиналарына һәм йөҙ башлыҡтарына мөрәжәғәт итә. Шулай итеп, Өфө эргәһенә Зарубин-Чика килгәнсе Ҡасҡын Башҡортостандың үҙәгендә һәм көнбайыш олоҫтарында Крәҫтиәндәр һуғышы территорияһын киңәйтеү буйынса ҡеүәтле эш йәйелдерә.

Тикшеренеүселәрҙең раҫлауынса, Ҡасҡын Өфө эргәһендә туплаған баш күтәреүселәр ғәскәренең яртыһын башҡорт атлылары тәшкил иткән. Ул Өфөнө көслө һөжүм менән бер тында алырға тырышҡан. 12 декабрҙә Өфөнө ҡамау һәм Өфө провинцияһының ғәйәт ҙур биләмәләрендә баш күтәреүселәр хәрәкәтенә дөйөм етәкселек итеү өсөн Пугачев эмиссары И.Н.Зарубин-Чика килә.[20] Әммә уның янында ла Ҡасҡындың Чесноковка лагерында һәм Өфө эргәһендәге баш күтәреү төбәгендә тотҡан урыны әһәмиәтен юғалтмай — түбәндәге документ шуның шаһиты. 18 декабрҙә Хәрби коллегияға Губанов менән Гребенщиковтың Ҡасҡын менән Ҡанбулатты «башҡа старшиналар менән» Өфө тирәһендәге рус халҡын бөлдөрөүҙә ғәйепләп яҙған ошағы ебәрелә.[21] 20 декабрҙә Хәрби коллегия Зарубинға ошаҡта һанап кителгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса ашығыс саралар күреүен талап итеп, указ ебәрә: «...Тамъян олоҫо полковниктары Ҡасҡын Һамаров менән Ҡанбулат Юлдашевҡа һәм башҡа старшиналарға тартып алынған имениены хужаларына — батшабикәнең тоғро улдарына ҡайтарып биреүҙәрен һәм бар йәһәттән ҡәнәғәтләндереүҙәрен, ә алпауыттарҙан тартып алынған хеҙмәткә яраҡлы аттарҙы бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ кире биреүҙәрен һәм, ғәйеплеләрҙе табып, һеҙгә килтереүҙәрен талап итеп указ ебәрергә».[22]

Ошоға бәйле рәүештә тарихи әҙәбиәттә, Өфөнө ҡамау башланғас, «баш күтәреүселәр лагерында милләт-ара мөнәсәбәттәргә ҡағылышлы киҫкен ҡаршылыҡтар башлана», әммә Зарубиндың килеүе менән «быға ҡәтғи нөктә ҡуйыла», тигән фекер нығынған.[23] Әммә, үрҙә әйтелгәндәрҙән тыш, башҡа сығанаҡтарҙа «киҫкен милләт-ара ҡаршылыҡтар» тураһында мәғлүмәттәр осрамай. Хәрби коллегияның 20 декабрҙә ҡабул ителгән указы ла дөйөм, киңәйтелгән төҫ алған. Шундай уҡ указдар И.С. Кузнецовҡа, Салауатҡа һәм башҡа етәкселәргә ебәрелгән.[24] Ҡасҡындың күп милләтле ғәскәренең дуҫ һәм берҙәм көрәше тураһында урындағы власть вәкилдәре үҙҙәре һөйләгән. 2 декабрҙә Өфө провинцияһы канцелярияһы генерал Фрейманға хәбәр итеүенсә, «1 декабрҙә башҡорттар дәүләт һәм алпауыт крәҫтиәндәре менән бергә Өфөгә ашыға».[25] Зарубиндың да Ҡасҡын менән Ҡанбулаттың эшмәкәрлегенә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдергәне теркәлмәгән.

Өфө янында тупланған баш күтәреү ғәскәренә етәкселек итеүҙән тыш, Ҡасҡын Өфөнән көньяҡҡа табан биләмәләрҙәге, Стәрлетамаҡ пристане, Бөгөлсән, Бөгөлмә төбәгендәге ваҡиғаларҙы күҙәтеүҙә тотҡан. Айырым алғанда, 7 декабрҙә генерал Фрейман Хәрби коллегияға Аҡбаш ауылына секунд-майор Осип Тевкелевтың язалаусылар командаһын ебәреүен хәбәр итә. Командала Польшанан ҡайтҡан 400 башҡорт булған. 6 декабрҙә Бөгөлмә биҫтәһенән алыҫ түгел урынлашҡан Аҡбаш ауылындағы О.Тевкелев командаһына Ҡасҡындың баш күтәреүселәр отряды һөжүм итә. Тевкелев командаһындағы башҡорттар шунда уҡ баш күтәреүселәр яғына күсә, ә үҙҙәренең командирын әсир итеп, Ҡасҡынға тапшыра. Фрейман яҙыуынса, «хыянатсылар 600-ләгән кеше була һәм бер нисә Яйыҡ казагы... Майорҙың командаһы тулыһынса тиерлек шунда

уҡ баш күтәреүселәр яғына күсә, ә һуңынан Тевкелев янында ҡалған бер нисә һаҡсы ла ихтилалсыларға бирелә һәм ауылды яндырып китә. Майорҙы ҡулға алғанда яуыз старшина Ҡасҡын иң тәүҙә уға ташланып, башына һуғып туҡмай башлай».[26]

Ҡасҡын Өфө эргәһендә 1774 йылдың яҙына тиклем хәрәкәт иткәндер, күрәһең. Был фекерҙе унbackup Йылан олоҫоноң йөҙ башлығы Шамай Мөслимовҡа командаһы менән Өфө эргәһенә килеп етеүен талап итеп ебәргән бойороғо раҫлай. Бойороҡ 1774 йылдың 11 мартында бирелгән. Ләкин, документтарҙан күренеүенсә, 24 майҙан 25-енә ҡаршы төндә баш күтәреүселәр армияһының Михельсон корпусы менән ҙур һуғышында Ҡасҡын ҡатнашмаған.

Ҡасҡындың исеме 1774 йылдың яҙында йәнә ишетелә башлай. Михельсон язалаусылар ғәскәрҙәренең баш командующийы А.И.Бибиковҡа ебәргән рапортында былай тип яҙа: «Хәҙер миңә Стәрлетамаҡ пристане һәм Воскресенск заводы тирәһендә йәшәүсе башҡорт халҡының вәкилдәре килде, улар старшина Күҫәпкол Азатов, Юлдаш Ҡотлин, Бүләк Үмәров һәм Ҡасҡын Һамаров исеменән тыныс йәшәргә һәм император ғәли йәнәптәренә тоғро хеҙмәт итергә вәғәҙә бирҙе».[27] Ошо документҡа таянып, тарихсылар Ҡасҡынды Крәҫтиәндәр һуғышы барышында гел икеләнгән старшиналар иҫәбенә индерә: халыҡ ихтилалы күтәрелгән осорҙа улар баш күтәреүселәр яғына сыҡҡан һәм хатта баш күтәреүселәр отрядтарына етәкселек иткән, ә хәрәкәт хәлһеҙләнгәндә ситкә тайпылған, ҡайһы берҙәре «тоғро» старшиналар һәм язалаусы көстәр яғына күскән.[28] Был фекерҙе нығытыусы тағы бер мәғлүмәт килтереп була. 1 апрель тирәһендә Ҡасҡын генерал Фреймандан ҡасҡын Пугачевты эҙәрлекләү өсөн 300 кешелек язалаусылар отрядын тупларға рөхсәт һорай. Генерал «ғәйебен таныған фетнәсегә» ышана һәм рөхсәт бирә.[29] Башҡа власть вәкилдәре лә ышана. 11 апрелдә Михельсон, «мине, Һамарин Пугачевты аулай, тип ышандыралар», тип рапорт бирә.[30]

Әммә был хыянат түгел, ә тәжрибәле етәксенең хәйлә ҡороуы була. Генералдың рөхсәт билеты менән ҡоралланып, Ҡасҡын язалаусыларҙың иғтибарын ситкә йүнәлтә, Тамъян олоҫона әйләнеп килә һәм Пугачевҡа Төп ғәскәрҙе тергеҙеүҙә ярҙам итеү өсөн башҡорттарҙы отрядтарға туплай, үҙәк һәм көньяҡ Башҡортостан халыҡтарын яңынан көрәшкә күтәрә. Ҡасҡындың күп һанлы ғәскәрҙәре, берсә төрлө йүнәлештә тирәяҡҡа һибелеп, берсә ҡурҡыныс көскә берләшеп, бөтә ерҙә өлгөрә. Ырымбур губернаһына һәм Өфө провинцияһы канцелярияһына, язалаусы корпустар командирҙарына даими рәүештә хәбәр еткерелеп тора: мәғлүмәтселәр Ҡасҡын тураһында борсолоу һәм ҡурҡыу тулы белдермәләр тапшыра. 10 майҙа Миндәй Өфө провинцияһы канцелярияһына ебәргән рапортында, Ҡасҡын Нуғай даруғаһы башҡорттарын «ҡаушата», «төрлө яҡтан ҡоралды башҡорттар йыйыла», тип яҙа. Миндәй ғаиләләрен һәм хужалыҡтарын Ағиҙел аръяғына тауҙар араһына оҙатыусы башҡорттарҙың ниәтен аңдый. Миндәй, Тамъян, Ҡыпсаҡ, Бөрйән һәм Үҫәргән олоҫтары башҡорттары берләшер ҙә, «тиҙ арала Ырымбур

эргәһенә килеп етер», «батшаның үҙ янына 40 меңлек көс йыйыуы» тураһындағы хәбәр ҙә шуға булышлыҡ итә, тип борсола.[31]

18 майҙа шул уҡ Миндәй мишәр старшинаһы Әбләй Смаилов менән бергә Өфө провинцияһы канцелярияһына Ҡасҡындың 17 майҙа Ырымбурға оҙатылған аҙыҡ-түлекте һәм унлаған рус кешеһен ҡулға төшөрөүе һәм «үҙендә тотоуы» хаҡында рапорт тапшыра. Бынан тыш, Ҡасҡын, тирә-яҡҡа хәбәр таратып, «үҙенә оҡшаш яман уйлыларҙы эргәһенә йыя». Уның йоғонтоһо аҫтында Ҡумрыҡ-Табын олоҫо старшинаһы Мораҙым Абдрахманов «биш йөҙләгән кеше йыйған да инде», Ҡасҡын үҙе «төрлө яҡҡа кешеләр ебәреүен дауам итә, уларҙы башҡорттар, тотоп бирмәйенсә, ылауҙарҙа оҙата».[32] Был документта Ҡасҡынды һәм уның өгөтләүсе ярҙамсыларын халыҡ яҡлауы асыҡ күренә.

1774 йылдың йәйендә лә, 1773 йылдың ҡышындағы кеүек, Ҡасҡын Өфө провинцияһы башҡорттарына, мишәрҙәренә, татарҙарына Пугачев ғәскәренә ҡушылырға, яҙалаусыларға ҡаршы торорға, «ҡаршы торһалар — барыһын да ҡырырға, көстәре етмәһә, исмаһам, һөжүм итергә» саҡырып мөрәжәғәт итә.[33] Ҡасҡындың оран һалыуы ҙур биләмәләргә ишетелгәндер, күрәһең. 10 майҙа уҡ мулла Бәшир Рахманғолов хәбәр ебәреүенсә, Ҡазан даруғаһының Калнин олоҫо старшинаһы Минәй Солтоҡов «биш көн элек... Башҡортостанға юлланып, Дим йылғаһы буйлап Нуғай даруғаһына хәл белешергә, ниәттәрен асыҡларға барып ҡайта». 10 көндән һуң әйләнеп ҡайтып, «Нуғай даруғаһы башҡорттары бөтәһе лә дәүләт хыянатсыһы Пугачевҡа ҡушылырға риза, уға Нуғай даруғаһы буйлап халыҡ ағыла», тип хәбәр итә. Ошонан һуң Минәй үҙенең улы Ишҡолдо «төрлө ауылдарға өйәҙ халҡын яуызға ҡушылырға димләргә» ебәрә.[34] Шулай итеп, Ҡасҡын һәм уның өгөтләүселәре Нуғай даруғаһының рус булмаған халҡын ғына түгел, ә Ҡазан даруғаһының айырым олоҫтары халҡын да көрәшкә күтәргән.

Ҡасҡындың баш күтәреүселәр отрядының дәһшәтле көсө тураһында төрлө юҫыҡтан мәғлүмәт ағылған. Мәҫәлән, Ҡасҡындың элекке фекерҙәше, элекке Пугачев полковнигы Ибраһим Мерәсев Өфө провинцияһы канцелярияһына 1774 йылдың 22 майында ебәргән рапортында, «поход старшинаһы Ҡасҡын Һамаров 600 кешелек ғәскәре менән Бөгөлсәндә 300 гусары һәм казагы булған майорға һөжүм итеп, пристангә һәм Ырымбурға үткәрмәйҙәр», тип яҙа.[35] 1774 йылдың майында Ҡасҡын Воскресенск заводының өлкән приказчигы П. Беспаловтың яҙалаусылар командаһы менән һуғыша. Бөгөлсән ауылы эргәһендә Ҡасҡын уларҙы тар-мар итә, Беспалов һәләк була.[36] Был документтан күренеүенсә, Ҡасҡын оран һалып ҡына ҡалмаған, үҙе лә ҡыйыу хәрәкәт иткән, яҙалаусыларҙың ҙур көстәре менән алышта ҡурҡыу белмәгән.

Ҡасҡындың дөйөм етәкселегендә билдәле башҡорт етәкселәре Минәй Солтоҡов, Турай Ишәлин, Мораҙым Абдрахманов һ. б. хәрәкәт иткән. Ҡайһы саҡта ҙур һәм мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн Ҡасҡын, Ҡаранай, Ҡотлогилде, Һеләүһен, Ҡәнзәфәрҙең баш күтәреүсе ғәскәрҙәре бергә ҡушылған. 1774 йылдың йәйендә, баш күтәреүселәр Өфөгә дәррәү яуға күтәрелгәндә, тап шулай була.[37]

Ҡасҡындың баш күтәреүселәр отрядтарында башҡорт, татар һәм мишәрҙәрҙән тыш, рустар һәм башҡа халыҡ вәкилдәре лә була. Әйтәйек, 22 майҙа мишәрҙәрҙең «тоғро» старшиналары Миндәй менән Әбләй Өфө провинцияһы канцелярияһына рапорт ебәреп, «алты йөҙләгән яуыз ҡалмыҡ Урал буйлап Бөгөлсәнгә юлланды, әгәр улар, бурҙар, ҡалмыҡтар, бурҙар башлығы Ҡасҡын Һамаровҡа ҡушылһа, халыҡты юлдан яҙҙырмаһалар ярар ине...», тип борсола.[38] Бында 7—8 майҙа Мостафа ауылы эргәһендә полковник П.А. Шепелевтың язалаусылар корпусы менән һуғышҡандан һуң Башҡортостанға Яңы Мәскәү юлы аша бәреп ингән ҡалмыҡтар тураһында һүҙ бара. Уларҙың бер өлөшө Ҡасҡын менән берләшкәндер, күрәһең. 29 майҙа хөкүмәт мәғлүмәтсеһе, татар Ҡотломәй Таймәтов Ҡасҡындың был ваҡытта «ике мең ҡалмыҡ һәм меңләгән башҡорт» менән эш итеүен хәбәр итә.[39] Крәҫтиәндәр һуғышы өсөн көстәрҙе арттырып күрһәтеү ҡәҙимге күренеш, әммә ҡалмыҡтарҙың Ҡасҡын отрядында һуғышыуын инҡар итеп булмай.

Ҡасҡындың, Ҡаранайҙың һәм башҡа башҡорт етәкселәренең әүҙем баш күтәреү эшмәкәрлеге, 1774 йылдың йәйендә Пугачевтың һәм уның Төп ғәскәренең Башҡортостанда пәйҙә булыуы хәрәкәттән ваҡытлыса ситкә тайпылған башҡорт старшиналарына хәл иткес йоғонто яһай. Мәғлүмәтселәр был хаҡта хәүефләнеп хәбәр итә.[40] Әлибай Мырҙағолов, Ҡыҙрас Муллаҡаев, Ҡәйеп Зыямбәтов, Ишҡар Арыҫланов һәм башҡа Пугачев полковниктары һәм Крәҫтиәндәр һуғышында әүҙем ҡатнашыусылар уның тәүге осоронда яңынан ихтилалға ҡушыла һәм ил халҡының язалаусылар корпустарына ҡаршы көрәшендә ҙур көскә эйә була.[41]

Ҡасҡын, Ҡаранай, Ҡотлогилде һәм Нуғай даруғаһы башҡорттарының башҡа етәкселәре 1774 йылдың көҙ аҙағына тиклем хөкүмәт ғәскәрҙәренә һәм «тоғро» старшиналар командаларына ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтеүен дауам итә. Был ҡаршылыҡтың көсөн хәрбиҙәр һәм граждандар властары ла танырға мәжбүр була. 30 сентябрҙә полковник Шепелев ҡаршылыҡ күрһәтеүен дауам итеүсе башҡорт етәкселәре Ҡасҡынға һәм башҡаларға көрәштән баш тартырға һәм Ҡазан Йәшерен комиссияһы начальнигы генерал Потемкинға ғәйебен танып барырға өгөтләп мөрәжәғәт итә.[42] «Башҡорттарҙың иң сосо» Ҡасҡындың һ.б. етәкселәрҙең һуғышты һаман дауам итеүенә губернатор Рейнсдорп та 1774 йылдың 24 октябрендә Панинға яҙған рапортында тәрән борсолоу белдерә.[43]

24 октябрҙә Ирәндек тауҙарында, Таулыҡай ауылынан 20 саҡырым алыҫлыҡта коллегия советнигы И.Л. Тимашев Ырымбур губернаторының фарманын үтәгәндә — хөкүмәт ғәскәрҙәре өсөн Урал аръяғы башҡорттарынан аҙыҡ-түлек штрафын йыйғанда башҡорттарҙың 8 күренекле етәксеһен ҡулға ала. Улар араһында Ҡасҡын да була.[44] Тимашев уларҙы провиант штрафын йыйыуҙа файҙалана, ә Ҡасҡын менән Ҡотлогилдене Шайтан-Көҙәй олоҫона Юлайҙы тәүбәгә килергә өгөтләргә ебәрә. 31 октябрҙә Юлай был хаҡта Тимашевҡа яҙа.[45] 9 декабрҙә Тимашев Юлайҙың тәүбәгә килеүе хаҡында генерал Скалонға рапорт бирә.[46]

...Ҡасҡын менән Ҡотлогилде барып киткәндән һуң Юлайҙың ғәйебен танып килеүе тураһында уның баш күтәреүселәр сиреүендә һуғышыусы башҡорттар 1775 йылдың май-июнендә үҙҙәренән һорау алғанда бәйән итә.[47] 1775 йылдың 6 июлендә Өфө провинцияһы канцелярияһында Юлай Ҡасҡын менән Ҡотлогилденең өгөтләүе буйынса ғәйебен танып килеүен тағы бер тапҡыр әйтеп үтә.[48] 11 ноябрҙә Ҡасҡын менән Ҡотлогилде, Тимашевтың ҡушҡанын үтәп, уға Юлайҙы алып килә. Ошонан һуң улар Таулыҡай ауылы янында ҡулға алынған башҡа етәкселәр менән бергә өйҙәренә ҡайтарыла[49]. 1774 йылдың ноябрендә Әлибай Мырҙағолов, П.С. Потемкиндың ҡушыуы буйынса, Нуғай даруғаһының барлыҡ старшиналарын һәм йөҙ башлыҡтарын йыйып, Ҡазан Йәшерен комиссияһына буйһоноуға килергә оҙата. Старшиналарҙың был ҙур төркөмөндә Ҡасҡын булмай, ләкин исемлектә Тамъян олоҫо старшинаһы Теләнсе Иҫәнсев иҫкә алына.[50]

Ҡазан Йәшерен комиссияһының генерал П.С. Потемкинға 1775 йылдың 13 февралендәге рапортында, Ҡазан губернаторы кенәз П.С. Мещерский 4 февралдә танылған башҡорт фетнәсеһе Салауаттың атаһы Юлай Аҙналинды, ә икенсе көнөнә Салауаттың үҙен дә алты яуыз фекерҙәштәре менән оҙатты, тип хәбәр ителә. Улар араһында иң тәүҙә Ҡасҡын Һамаровтың исеме атала. Тимәк, Ҡасҡын Йәшерен комиссияға күпкә һуңыраҡ, Салауат һәм Юлай менән бергә килтерелгән. Ҡасҡындың һәм уның көрәштәштәренең төрмә шарттарын документтың исеме үк һөйләп тора — 1775 йылдың 10 мартынан «Ҡазан Йәшерен комиссияһы колодниктарының исемлеге».[51] Ләкин шул уҡ комиссияның икенсе бер документында Ҡасҡын ҡалала квартираларҙа йәшәгән старшиналар исемлегендә иҫәпләнә.[52] 6 апрелдә ул Кинйә Арыҫланов эше буйынса күрһәтмә биргән.[53]

Билдәһеҙ сәбәп буйынса Ҡасҡындың исеме Уса һәм Себер даруғалары башҡорттары исемлегендә йыш осрай. Ҡазан Йәшерен комиссияһында башҡорт етәкселәренең бер нисә ҙур төркөмө, язаға тарттырылмайынса, билет биреп азат ителгән. 1774 йылдың 28 декабрендә, 1775 йылдың 17 һәм 27 ғинуарында ирекке ебәрелгәндәр араһында Ҡасҡындың исеме юҡ. 1775 йылдың 5 февралендә төҙөлгән колодниктар исемлегендә уның фамилияһы ҡаршыһына «Комиссия талабы буйынса ебәрелгән, сөнки уның эше буйынса күрһәтмәләр бар: старшина сағында халыҡты ялған батша яғына сығырға өгөтләгән, тоғро ғәскәрҙәргә ҡаршылыҡ күрһәткән»[54] тип яҙылған. Ҡасҡын, хөкөмгә тарттырылмайынса, Ҡазан губернаторы П.С. Мещерскийҙың 1775 йылдың 27 мартындағы указы менән азат ителгән.[55] Һуңғы тапҡыр Ҡасҡын 1777 йылғы документтарҙа телгә алына. Шул йылдың 22 декабрендә Тамъян олоҫо старшинаһы Ҡасҡын Һамаров старшина Ҡотош Мортазин һәм һайланма кешеләр менән бергә Ағиҙел йылғаһы буйындағы аҫаба ерҙәрҙе прапорщик Мурза Ибраһим Чанышевҡа һатыу буйынса документ төҙөүҙә ҡатнашҡан. Ҡасҡындың артабанғы яҙмышы билдәле түгел. Әммә, һуңғы документҡа ҡарағанда, батырҙың ҡартлығы тыныс уҙғанға оҡшаған.

## АҢЛАТМАЛАР:

[1] РГАДА. Ф. 6. Д.593. Л. 317. об. Крестьянская война. 313-сө б.
[2] Материалы. Т. IV. Ч. 1. 93-сө б.
[3] Шунда уҡ. 215-се б.
[4] Шунда уҡ. 300-301-се б.
[5] Шунда уҡ. Ч. II. 45-се б.
[6] РГАДА. Ф. 6. Д.467. Ч. 10. Л. 533 об.
[7] Крестьянская война. 313-сө б.
[8] Шунда уҡ. 39-сы б.
[9] РГАДА. Ф. 6. Д.511. Л. 74.
[10] Кулбахтин Н.М. Участие башкир в Крестьянской войне. 38-се б.
[11] Мартынов М.Н. Воскресенский завод в Крестьянской войне 1773—1775 гг. // Исторические записки. 1967. Т. 80. 291-се б.
[12] РГАДА. Ф. 1100. Д.3. Л. 106.
[13] Крестьянская война. 67-се б.
[14] Крестьянская война в России. Т. III. 219-сы б.
[15] Крестьянская война. 55-56-сы б.
[16] РГАДА. Ф. 6. Д.416. Ч.I. Л. 167.
[17] Крестьянская война. 66-сы б.
[18] Андрущенко А.И. Күрһ. хеҙм. 123-сө б.
[19] Крестьянская война. 67-се б.
[20] Крестьянская война в России. Т. II. 224, 229-сы б.
[21] РГАДА. Ф. 6. Д.312. Ч.2. Л.7.
[22] Крестьянская война. 69-сы б.
[23] Лимонов Ю.А., Мавродин В.В., Панеях В.М. Пугачев и пугачевцы. Л., 1974. 56-сы б.
[24] Крестьянская война. 354-сы б.
[25] РГВИА. Ф. 20. Д.1231. Л. 16 об.
[26] РГВИА. Ф. 20. Д.1231. Л. 16 об.
[27] Крестьянская война. 122-сы б.
[28] Очерки по истории Башкирской АССР. Т.1. Ч.1. Өфө, 1956. 223-сө б.
[29] РГВИА. Ф. 20. Д.1232. Л. 407.
[30] Шунда уҡ. Д. 1237. Л. 113.
[31] РГАДА. Ф. 6. Д.592. Л. 252.
[32] Крестьянская война. 146-147-се б.
[33] Шунда уҡ. 153-сө б.
[34] РГАДА. Ф. 6. Д. 592. Л.223 и об.
[35] Крестьянская война. 156-сы б.
[36] РГАДА. Ф. 10. Д.10. Л. 6 и об.
[37] РГАДА. Ф. 1100. Д.9. Л.531 а; Крестьянская война. 156, 399-сы б.
[38] Шунда уҡ. Ф.6. Д. 592. Л.432.
[39] Шунда уҡ. Ф.20. Д.1239. Л.42 об.
[40] Крестьянская война. 396-сы б.
[41] Был етәкселәрҙең ҡатнаш баш күтәреү отряды 1774 йылдың 5 июнендә генерал П.М.Голицындың корпусы менән һуғышҡа инә, шунан һуң хәрәкәттән тамам ситләшә, ә бер нисә көн үткәс язалаусылар яғына сыға. Ҡарағыҙ: Ҡолбахтин Н.М. Күрһ. хеҙ. 235-се б.
[42] Крестьянская война. 235-се б.
[43] Шунда уҡ. 345-346-сы б.
[44] Шунда уҡ. 246-247-се б.
[45] РГАДА. Ф.1100. Д.12. Л.129.
[46] Крестьянская война. 267-се б.
[47] Шунда уҡ. 326-сы б.
[48] Шунда уҡ. 331-се б.
[49] Шунда уҡ. 268-се б.
[50] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 79.
[51] РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л. 95.
[52] Шунда уҡ. Д.467. Ч.12. Л. 397; Д.507. Ч.3. Л.121; Ч.5. Л.175 об.
[53] Шунда уҡ. Д.507. Ч.3. Л. 111 об — 125; Ч.5. Л. 28 и об.
[54] Крестьянская война. 313-сө б.
[55] Шунда уҡ. 28-се б.
[56] Шунда уҡ. Ч.3. Л. 121.
[57] Шунда уҡ. Ч.5. Л. 176: Таймасов С. Күрһ. хеҙм. 191-се б.